*Рәшит ШӘКҮР*

# Ҡош юлынан барыусылар



## 1

Хәйбулла төбәгендә башҡорттоң илаһи рухиәт донъяһында яҡты йондоҙ булып балҡыған бихисап талант эйәләре үҫеп сыҡҡан. Мәшһүр ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаев ошо изге тупраҡта тыуып үҫкән, ошо яҡтың йыр-моң хазиналарын күңеленә һеңдереп, башҡорт ҡурайының данын бөтөн донъяға таныҡҡан. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында халҡыбыҙҙың онотолоп барған боронғо өҙләү сәнғәтен беҙ атаҡлы өҙләүсе Мансур Саламатов башҡарыуында тәүге тапҡыр күреп, һоҡланып, таң ҡалып йөрөнөк. Уның һөнәрен артабан Мансур Үҙәнбаев дауам итте. Заманында Мырҙагилде Ураҙғолов, Дәүләтғәле Хәсәнов, Сәлмән Сынғыҙов һымаҡ күренекле ҡурайсылары, йырсылары, скрипкасылары менән дан тотто Хәйбулла. Бейеү оҫтаһы, арабыҙҙан бик иртә китеп талантлы хореограф Йәүҙәт Бикбирҙин районның һәм республикабыҙҙың мәҙәниәт тормошонда яҡты эҙ ҡалдырҙы. Атаҡлы халыҡ музыканты Сәйфулла Дилмөхәмәтовтың илһамлы ҡурай моңдары дәүеребеҙҙең сағыу бер күренешенә әйләнде. Ғәм халыҡ алдында, ҡырлы ҡурайын ҡулында тотҡан килеш, уҙған йылдың йәмле август көнөндә яҡты донъя



*Әсмә Усманова*

менән хушлашҡан Сәйфулла Ишҡәле улы, йөҙҙәрсә йәш ҡурайсыларҙы тәрбиәләп, районда яңы дәүерҙең ҡурайсылар мәктәбен тыуҙырҙы, Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтовтарҙан килгән оҫталыҡ эстафетаһын килер быуындарға тапшырып ҡалдырыуға өлгәште. Хәйбулла яҡтарының, йәмле Һаҡмар буйҙарының ҡото булып, шөкөр, бөгөнгө көндә лә имен-аман, һау-сәләмәт йәшәп ята арҙаҡлы халыҡ йырсыһы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев.

Бына ошо атаҡлы халыҡ таланттары йондоҙлоғонда тағы ла бер сағыу исем бар. Ул — йырсы, сәсәниә, һәүәҫкәр фольклорсы һәм этнограф, данлыҡлы “Ҡош юлы” ансамбленең етәксеһе Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы Усманова. Әйткәндәй, Әсмә апай өсөн быйыл икеләтә юбилей йылы: 10 августа уға — 75 йәш, ә инде район үҙәге Аҡъярҙа ул ойошторған һәм тәүге көндән алып алмашсыһыҙ етәкселек иткән “Ҡош юлы” халыҡ коллективына 20 йыл тула. Әйткәндәй, ансамблгә ”Халыҡ коллективы” тигән маҡтаулы исем 2003 йылдың 28 ноябрендә Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрының махсус приказы менән бирелгән. Был, әлбиттә, хәйбуллалар өсөн дә, республикабыҙҙың үҙешмәкәр сәнғәт тарихында ла күркәм ваҡиға.

**2**

Ҡош юлы… Беҙҙең уй-хыялдарыбыҙҙы үҙенә тартып, бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт, илһам биреп тора бейектәге күк йөҙөндә, ысынлап та, ҡоштарҙың каруан юлы һымаҡ алыҫ-алыҫтарға теҙелешеп киткән был сихри йондоҙло юл. Әммә хикмәт уның илаһи күренеш булыуында ғына ла түгел икән дә. Аҡъяр ауылында берҙән-бер көндө йыйылышып өр-яңы фольклор төркөмө ойошторорға ҡарар иткән апайҙар һәм әбейҙәр асмандағы был серле юл хаҡында халыҡ аңындағы поэтик легенданы иҫкә төшөрәләр. Борон заманда, тип бәйән итеlә унда, ҡыш яҡынайғас, ҡоштар йылы яҡҡа осоп киткән ваҡытта бер заман ҡапыл көндәр һалҡыная. Бала ҡоштар һыуыҡтан йонсоп, оса алмай башлайҙар. Өлкән торналар, йәш торналарға маяҡ итеп, эре йөндәрен, ҡаурыйҙарын ҡоя-ҡоя осҡандар. Шул ҡаурыйҙар артынан бала ҡоштар эйәргәндәр һәм имен-аман барыр ерҙәренә барып еткәндәр. Һуңынан был ҡаурыйҙар, ҡауырһындар күк йөҙөндә Ҡош юлы йондоҙлоғо булып ҡалған, ти. “Фольклор төркөмөбөҙ исеме — ”Ҡош

юлы” — мираҫ булһын тинек йәш быуынға”. Шулай тиҙәр ансамбль коллективы ағзалары. Ошондай изге ниәт менән 1985 йылда тотош бер ансамбль булып берләшә улар. Төп ижади маҡсаттары — халҡыбыҙҙың боронғо ырым-йолаларын, традицион музыкаль-поэтик сәнғәт өлгөләрен тергеҙеп, йәш быуынға еткереү, милли, мәҙәни мираҫыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу. Ансамблдең репертуарында йола фольклоры өлгөләре, йырҙар, ҡобайырҙар, бәйеттәр, йырлы, таҡмаҡлы уйындар, йырлап йә таҡмаҡ әйтеп бейеү күренештәре төп урынды ала. Элекке таҡмаҡ әйтеп йә ҡыҫҡа көйгә йырлап бейеү уйындары ғына ла тиҫтәнән артып китә: “Түңәрәк”, “Өсмөйөш”, “Һигеҙаяҡ”, “Көлтә бәйләү”, “Иген баҫыу”, “Кәриә-Зәкәриә”, “Өйрәкәйем, сумаһың”, “Күпер” һәм, әлбиттә, атаҡлы “Наза” уйыны. Был уйындарҙың күбеһе ансамблдә ҡатнашыусыларҙың йәшлек хәтирәһе булараҡ күңелдәренә һеңеп ҡалған (әйткәндәй, “Ҡош юлы” ағзаларының йәше 40 менән 80 араһында). Уйындарҙың тағы бер төрө — ултырып уйнала торғандары: “Күрше”, “Уй, яратам!”, “Боҙоҡ телефон”, “Үгеҙ йөҙөк” тип атала улар. “Һаҡы таш”, “Ҡатыҡ тәмләү”, “Йәшенмәк”, “Беҙ ун ике ҡыҙ инек” тигәндәре — балалар уйындары. Отоп алһындар ҙа уйнай бирһендәр әйҙә! ”Ҡарға бутҡаһы”, ”Кәкүк сәйе” байрамдарында элек “Ситән үрәм”, “Аҡ тирәк–күк тирәк”, “Йәшерәм яулыҡ”, “Өсөнсөһө артыҡ”, “Диңгеҙ тулҡынлана” кеүек уйындарҙы уйнағандар. Ә “Ҡот ҡойоу”, “Мейе томороу”, “Биртек йыйыу”, “Бәкәл ҡырҡыу” һымаҡ этнографик күренештәр – борондан килгән халыҡ дауалау ысулдарын поэтикалаштырыу йәһәтенән ысын мәғәнәһендә уникаль ҡомартҡылар.

Туй йолаһы күренештәре үҙҙәре генә лә бер тиҫтәнән артып китә: “Кейәү һандығы әҙерләү”, “Килен һандығы әҙерләү”, “Ҡоҙаларҙы ҡороҡлау”, “Һебәгә көрәшеү”, “Сыбыртҡылау”, “Ҡоҙаса сәйе”, “Буйҙаҡ ҡоҙа”, “Йыуаса”, “Килен һөйөү”, “Һыу башлау”, “Һарауыс” һәм башҡалар. Был тамашаларҙың һәр береһе – халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән йола ҡанундары менән бәйле үҙенсәлекле йыр, уйын, хореография күренештәре. Тәрән аҡыл да, тормош тәжрибәһе лә, күркәм хис-тойғолар ҙа, нескә юмор ҙа — һәммәһе лә бар тамашаларҙа. Бына туй йолаларының береһе — “Сыбыртҡылау” тигән күренеш. Ғәжәп халыҡсан, ысынлап та тормошта булыуы бик ихтимал туй мажараһы нигеҙ итеп алынған унда…

Борон заманда туйҙа ҡунаҡ ҡоҙаның бер ҡоҙасаға күҙе төшкән. Ҡоҙаса менән һөйләшә алмаған, сөнки ҡатындар бер өйҙә, ирҙәр икенсе өйҙә айырым мәжлес үткәрәләр (башҡортта 1930-сы йылдарға тиклем туй бер аҙна буйы барған. Унан өс көнгә ҡалған. Туй ваҡытында төрлө уйындар, бәйгеләр үткәрелгән, мөнәжәтселәр мөнәжәт әйткән, ҡурайсылар ҡурайҙа уйнаған, йырсылар йырлаған, туйҙы алып барыусылар эҙмә-эҙле туй йолаларын атҡарғандар). Әлеге ҡоҙасаға күҙе төшкән ҡоҙа, туйҙан һуң ҡалып ҡоҙасаны күреп һөйләшергә тип, атының дуғаһын йәшереп ҡуйған. Хәҙер ҡоҙа ҡайта алмай. Әммә төп ҡоҙа ла ҡайта алмай, сөнки борон туйға барғанда ла, ҡайтҡанда ла төп ҡоҙа иң артҡы санаға ултыра, был инде туйға алып

барған туғандарының именлеген һаҡлау тигән һүҙ. Хужалар ҡоҙаның дуғаһын эҙләй:

Табыл, дуға, табыл, дуға,
Ник табылмайһың, дуға?
Һин табылмаһаң, дуға,
Тағы ҡайтмай баш ҡоҙа! —

тип көйләп йөрөйҙәр.

Дуғаһын йәшергән ҡоҙа ла шунда дуғаһын эҙләп йөрөгән була, ул да көйләп йөрөй. "Табыл, дуға, табыл, дуға", — ти ҙә:

Юҡ, табылма, табылма, дуға,
Табылдыниһәң, дуға,
Ҡоҙаса төшмәй бит ҡулға, —

тип һамаҡлай.

Быны ишетеп, хужа ҡоҙалар эштең нимәлә икәнен аңлап алалар. "Ҡоҙаның әллә ҡасан ҡайтыр ваҡыты етте, сыбыртҡыларға кәрәк!" — тиешәләр. Ошонан һуң туйҙың иң аҙаҡҡы көнөндә "Хуш аяғы" (хушлашыу ашы) үткәрелә. Шул ашты әҙерләр алдынан ҡоҙасалар ҡунаҡ ҡоҙаларҙы сыбыртҡылай. Сыбыртҡылау төртмә һүҙҙәр, йыр, таҡмаҡ, әйтеш менән бергә бара. Мәҫәлән, хужа ҡоҙалар ошолай тип йырлай:

Таналыҡай һыуы аға буй-буй,
Ташлы һыуы — арҡыры.
Уйнаныҡ та, һыйланыҡ та,
Хуш итербеҙ инде, ахыры.

Ҡунаҡ ҡоҙалар яуап бирә:

Бейек тауҙың баштарында
Китә юлдар айыры.
Ҡабаланмайыҡ, ҡоҙалар,
Бергә ултырыу хәйерле.

Әйтеш шулай дауам итә. Уйынсыҡ таҫмаларҙан суҡлап үрелгән сыбыртҡы менән ҡоҙаларҙы "сыбыртҡылайҙар". "Ҡайтмайбыҙ, тибен яҡшы" һымаҡ шаян һүҙҙәр әйтеп, сыбыртҡы суғына аҡса бәйләйҙәр. Шул аҡсаға ҡоҙасалар, баҙарға барған булып әйбер алып, ҡоҙаларҙы һыйлай. (Башҡорттоң туй йолаларының бөтөнөһөндә лә туй үткәреүсегә ярҙам итеү күҙ уңында тотола. Килен һандығы әҙерләү өсөн дә буласаҡ килендең әсәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙы сәйгә саҡыра. Һәр кем ярҙамға әйбер алып килә). Сыбыртҡылауҙың ҡоҙаларҙы тамам оҙатҡансы әйтер өсөн таҡмаҡтары ла бихисап:

Аттарығыҙ туры икән,
Йүгәндәре һырлы икән.
Ҡоҙалар вайымһыҙ икән,
Ҡайтырға уйламай икән.

Көрәгәләр бушаған —
Алыштырырға кәрәк.
Иркәләнеү етте инде —
Сыбыртҡыларға кәрәк.

Ҡоҙаларҙы оҙатайыҡ
Таналыҡты үткәнсә,
Таналыҡты үткәнсә лә
Өйөнә ҡайтып еткәнсә.


*Юлдашбаева Бәҙернур*

Башҡорттоң тормош-көнкүрешендә күмәк эш, бер-береңә ярҙам итеү йолаһы элек-электән мөһим роль уйнаған. Һуғым һуйыу, бура күтәреү, киндер иләү, йөн тетеү, кейеҙ баҫыу кеүек эштәр өмә яһап, күмәк көс менән атҡарылған. Ҡаҙ өмәһе лә — шул уҡ йола күренеше. Бындай этнографик күренештәр эш, хеҙмәт процесы, күңелле йырҙар менән үрелеп бара, был иһә тамашасы күңелен арбай, ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Бер ҙә бушҡа түгел — "Ҡош юлы" ансамбле, 2002 йылдың майында Әбйәлил район үҙәге Асҡарҙа үткәрелгән "Аҡ кейеҙгә баҫһам" конкурсында кейеҙ баҫыу күренеше менән ҡатнашып, дипломант исеменә лайыҡ булды.

1930-сы йылдар башҡорт халыҡ ижадында таҡмаҡтарҙың, киске уйындарҙың сәскә атыу осоро булғандыр, күрәһең. Ул ваҡытта клубтарҙа кистәрен "Айҙар ғынайым", "Ал итә-итә", "Лүгәлүк", "Трҙаратаратайым", "Гөлкәйем", "Золотой медиатор", "Күпер аҫты күләгә" һымаҡ таҡмаҡтар һәм, әлбиттә, "Наза", "Колхозда ял", "Көлтә бәйләү" кеүек дәртле, күңелле йырҙар яңғырап торған. Ундай әҫәрҙәр ҙә "Ҡош юлы" ансамбленең репертуарында урын алған. "Атайымдан "Ләүсәтин", "Сәриә", "Тирәккәйем" кеүек таҡмаҡтарҙы отоп алғайным", — ти Әсмә апай. Репертуар, бынан тыш, боронғо халыҡ йырҙары, республикабыҙ тормошондағы күренекле ваҡиғаларға арналған әҫәрҙәр иҫәбенә лә байый бара. Ансамбль район һәм Башҡортостан күләмендә үткәрелгән фольклор байрамдарында, фестивалдәр, конкурстарҙа ҡатнашмайынса ҡалмай. Бындай ваҡытта йөктөң иң ауыры етәксегә төшә, әлбиттә. Уға бер юлы репертуар өҫтөндә эшләргә лә, сценарий яҙырға, художество етәксеһе бурысын атҡарырға ла тура килә. Шөкөр, "Ҡош юлы" ике тиҫтә йыл буйы үҙен һынатмай, барған бер ерҙә халыҡтың ихтирамын яулай. Ансамбль һәм уның етәксеһе уҙған йылдың июнендә, "Салауат йыйыны — 2004" Республика фольклор байрамында ҡатнашып, айырыуса танылыу тапты. Коллектив был байрамда фольклор ансамблдәре бәйгеһендә еңеүсе тип табылды һәм "Үҙ төбәгенең милли кейемен һаҡлап алып ҡалғаны өсөн" номинацияһында махсус приз менән бүләкләнде. Әсмә Усмановаға иһә "Салауат йыйыны"нда уңышлы сығыш яһағаны өсөн ЮНЕСКО-ның Рәсәй ассоциациялары, үҙәктәре һәм клубтары

федерацияһының Дипломы тапшырыла. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың бөйөк улы Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға арналған ул күркәм байрамда ҡатнашып сығыш яһау һәр кем өсөн оло мәртәбә лә, шатлыҡ та, ғорурлыҡ та. Хәйбуллалар ҙа уға ҙур дәрт-илһам менән әҙерләнәләр. Салауатҡа арналған башҡорт халыҡ йырҙарын өйрәнәләр, Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы, ошо ваҡиғаға арнап, “Мәңге йәшәй Салауат” тигән йыр, “Салауат” тигән шиғыр ижад итә. Ансамбль ағзалары был юлы ла, байрамда сығыш яһар өсөн, костюмдарҙы үҙҙәре тегеп кейә. Жюри ағзалары уларҙың быңдай оҫталығын да юғары баһалай. Ә байрам программаһында “Ҡош юлы”на, республикабыҙҙың иң күренекле халыҡ ансамблдәре менән бер рәттән, ғәйәт яуаплы бурыс йөкмәтелә – коллектив батырҙы яугирлыҡҡа бағышлау картинаһын тасуирлап бирергә тейеш була. Был хаҡта Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы ошолай тип иҫкә ала: “Салауат йыйыны” байрамының тамаша сценарийы Салауаттың бала сағынан алып уның үҫмер сағын, яуға оҙатыу, Пугачевҡа ҡушылыуҙы, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыш эпизодтарын һәм башҡа ваҡиғаларҙы күрһәткән ун ике күренештән тора ине. Һәр күренеште Башҡортостан райондарының төрлө фольклор төркөмдәре әҙерләне. Өфөнән Республика халыҡ ижады үҙәге беҙҙең “Ҡош юлы”на “Салауатты яугирлыҡҡа бағышлау” темаһын тәҡдим итте. Мин сценарийын төҙөнөм. 25-30 минутлыҡ сығышыбыҙ халыҡҡа бик оҡшаны. Тамаша барышында Салауатты данлаған йырҙарыбыҙҙы йырланыҡ, мин үҙем сығарған “Салауат” тигән шиғырымды уҡыным, ҡобайыр әйттем”.

“Ҡош юлы” ансамблендә, алда әйтелгәнсә, ҡырҡ йәштән һикһәнгә тиклемге егерменән артыҡ кеше йөрөй. “Дүртәүебеҙ үлеп ҡалды, — ти Әсмә апай. — Хәлимә Нафиҡова бейеүсе, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ине. Госпиталдә санитарка булып эшләгән. Шунда концерт бирә торған булғандар. Сәлимә Күсәкова апай ҙа бейеүгә оҫта булды, оригиналь бейеүҙәрҙе бейей торғайны. Уҡытыусы Гөлнур Мәмбәтова апай йырға, моңға маһир ине. Шиғырҙар сығара торғайны. “Үҙем ҡартмын, үҙем шатмын”, — тип йөрөр ине. Рәхимә Усманова бик матур бейей ине”.

Ансамблдә Шәмсениса Нураева, Фәимә Дәүләтбаева, Мәрйәм Юнысова, Бәҙернур Юлдашбаева, Миңнеямал Һағынбаева, Миңзифа Ҡоҙабаева, Факиһа Ишҡабулова, Файза Түснәкова, Мәрйәм Юнысова һымаҡ өлкән апайҙар, әбейҙәр оҙаҡ ҡына йылдар ҡатнашып йөрөй. Һуңғы осорҙа ижади составҡа Йомабикә Байғабулова, Тәнзилә Ҡыҙрасова, Зәйтүнә Юлдашбаева, Эльвира Такалова, Роза Намазова, Рәхимә Кәримова, Флүрә Аралбаева, Ғилминәр Илембәтова, Флүрә Мәжитова, Алһыу Юлдашбаева, Әлмирә Юлдашбаева, Вәсилә Түләбаева, Тәнзилә Тәүелбаева һымаҡ һәүәҫкәрҙәр өҫтәлгән. Улар араһында йырсылар ҙа, бейеүселәр ҙә, гармунсылар, мандолинасылар ҙа бар. Йәшерәк быуын вәкилдәре араһынан Фәрит Хәкимов, Әсғәт Ҡунафин, Рафиҡ Түләбаев, Вәзих Мәмбәтов, Рәил Аллабирҙин һымаҡ ир-егеттәрҙең өҫтәлеүе коллективтың ижади мөмкинлектәрен тағы ла киңәйтеп ебәрә. Ансамблдең ҡурайсыһы Әсғәт Ҡунафин, мәҫәлән, профессияһы буйынса табип. Ҡумыҙҙа ла, гармунда ла уйнай, туҙ



*”Ҡош юлы” фольклор төркөмө*
*”Алтын шишмәләр” фольклор фестивалендә. Өфө.*

менән һыҙғырып, төрлө көйҙәр башҡара. Һәр йәһәттән дә һөнәрле, талантлы, халыҡ ижадын, халыҡ сәнғәтен мөкиббән китеп яратҡан һәүәҫкәрҙәр ҡатнаша “Ҡош юлы”нда. Тылсымлы, йырлы-моңло Ҡош юлдары буйлап оҙаҡ йылдар бергә-бергә барырға насип булһын һеҙгә, туғандар!

## 3

Әсмә Усманованы Ҡош юлы буйлап йырлы, моңло торналар төркөмөнә юл башлап барыусы Оло инә торна тип атарға була торғандыр. Инде уның үҙенең оҙон тормош юлы, күңел түрендә ғүмерлек яҡты хистәр уятҡан бала сағы, атай йорто тураһында ла бәйән итергә ваҡыттыр.

“Мин, Усманова (ҡыҙ фамилиям — Торомтаева) Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы, — тип яҙа ул үҙенең автобиографияһында, — 1930 йылдың 10 авгусында Башҡорт АССР-ының Хәйбулла районы Бикбау ауыл советы Утарбай ауылында тыуғанмын. Мин йырсылар донъяһында үҫтем. Атайым йырсы, әсәйем бейеүсе ине. Беҙ бәләкәй саҡта боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын йырлай торғайнылар. Торомтаевтар бөтөнөһө лә йырсы булды”. Шулай тип иҫкә ала Әсмә апай: ”Утарбай Хәйбулла районының йәмле Һаҡмар буйындағы ауыл ине, 1963 йылда юҡҡа сыҡты. Халыҡ Ивановка тигән урыҫ ауылына күсте. Утарбайҙа Торомтаевтар, Атановтар, Азаматовтар, Батыровтар һәм башҡалар йәшәне. Торомтаевтар — уҡымышлы хәлфә династияһынан”.

Торомтаевтарҙың тәрәндәге тарихы мине, меңләләрҙең ҡор башын, ғәжәпләндерә төштө. Әсмә апай әйтеүенсә, Крәҫтиәндәр ихтилалы ваҡытында улар, мең ҡәүеме башҡорттары, ҡасып килеп, Һаҡмар йылғаһының уң яҡ яры буйында төйәкләнгәндәр. Ауылдың, йәғни улар ултырған урындың, баштараҡ исеме лә булмаған, сөнки Торомтаевтар байтаҡ ваҡыт властарҙан йәшеренеп йәшәргә мәжбүр була. 1780 йыл-

да тыуған Торомтаев  Утарбай Солтангәрәй улы Солтанғолов фамилияһы менән Олтораҡ ауылынан армияға китә. Хәрби хеҙмәттә полк муллаһы булып, офицер званиеһы алыуға өлгәшә, ике көмөш миҙал тағып, бик болло булып ҡайта. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, 1814 йылда Парижды алған өсөн бүләкләнә. Үҙенең уҡымышлылығы, хөкүмәткә тоғро хеҙмәт итеүе менән Утарбай ҙур абруй ҡаҙана. 1812 йылғы һуғыштан ҡайтып, бер аҙ ваҡыт үткәс, Утарбай, ҡайныһының кәңәшен тотоп, йортон Һаҡмарҙың һул яғына күсереп һала. Уның артынса шул төбәккә Атановтар килеп ултыра. Ауылға Утарбай исеме бирелә. Утарбай үҙ аҡсаһына ауылда мәсет һалдыра.

Бына ошо легендар Утарбай Торомтаевтан таралып, тамыр йәйеп киткән Торомтаевтар. Быуын-быуынға бик күп данлыҡлы, абруйлы ил ағалары менән билдәле була был нәҫел. Әсмә апайҙың ҡартатаһы Ғәбделәхәт Бәҙәмша улы Торомтаев хәҙрәт (1868—1942) 1919 йылда үҙ өйөндә Әхмәтзәки Вәлидиҙе ҡунаҡ итә, уның отрядындағы ҡурайсы һәм йырсы башҡорт егеттәре арҙаҡлы ил башлығына арналған “Ирмәк” тигән йырҙы йырлап ишеттерәләр. Мәүләмбирҙе Ғәбделәхәт улы Торомтаев (1909—1999), шул йырҙы отоп алып ҡалып, оҙаҡ йылдар буйы хәтерендә һаҡлай. “Мин иҫ белгәндә ул йырҙы атайым гел генә үҙ алдына йырлап йөрөй торғайны. Мин уның һүҙҙәрен дә, көйөн дә бәләкәйҙән яттан белә инем”, — ти Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы. Әммә бары тик 1987 йылда тәү башлап сәхнәгә сығып йырларға батырсылыҡ итә Әсмә апай “Ирмәк”те. Унда ла тарихын һөйләгәндә серҙе сисеп бөтмәй, ҡыҙылдар йырлап киткән, тип аңлатып бирергә тура килә. Бары тик 1990 йылда ғына, Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләгән осорҙа, ниһайәт, йырҙың вәлидиселәрҙән, йәғни Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшеп, йәнен фиҙа ҡылған ҡаһарман милләттәштәребеҙҙән аманат булып ҡалған булыуын ҡурҡмайынса һөйләргә мөмкинлек тыуа. Теге ваҡытта 9-10 йәштәрҙәге малай көйөнсә йырҙы-көйҙө отоп алып, хәтерендә һаҡлаған Мәүләмбирҙе ағай ҙа иҫән була. Әсмә апай атаһынан йырҙың тарихы менән бәйле ваҡиғаны яңынан һөйләтеп, был ҡәҙерле иҫтәлекте фольклорсыларға яҙҙыра, үҙе лә бәйгеләрҙә сығыш яһаған саҡта йырҙы башҡарыр алдынан иң элек тарихын һөйләп йөрөй башлай. Шулай итеп тарихыбыҙҙың ҡәҙерле бер бите өҙөлмәйенсә һаҡлап алып ҡалына. Хәҙер инде “Ирмәк” йырын республикала халыҡ ижадын һөйөүселәр араһында белмәгән кеше һирәктер.

Йәнә әйтеп үтергә кәрәк: арҙаҡлы халыҡ йырсыһы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев ағайҙың бала сағы әсәһе яғынан ҡартаталарында, Аҡһыйыр ауылында үтә. Шунда уҡ ошо йырҙы Юлсанова Нәбирә апайҙан, үҙенең бер туған апаһы Ҡаҙаҡбаева Зәйнәптән ишетеп үҫкән. “Зәйнәп апайым “Ирмәк”те матур итеп йырлар ине. Аҡһыйыр халҡы бөтөнөһө лә “Ирмәк”те йырлата торғайны”, — ти Мөхәмәтйән ағай.

Вәлиди үҙенең отряды менән ҡышҡы сана юлы буйлап барып, Утарбайҙан һуң Бикбауҙа, Аҡһыйырҙа туҡталып үткән. Тимәк, Аҡһыйырҙа ла баяғы ҡурайсы менән йырсының йырын, көйөн отоп алып ҡалыусылар булған. Был иһә йырҙың тарихын тағы ла дәлиллерәк итә, уның

ҡиммәтен бермә-бер арттыра. Ә инде “Ирмәк”тең, ҡот осҡос репрессия йылдары, ике йөҙлө совет власы дәүере аша үтеп, һаҡланып ҡалыуы өсөн беҙ Хәйбулла районының ошо төпкөлдәге Утарбай һәм Аҡһыйыр ауылдары ҡарттарына, уларҙың аҡылына, зиһененә бурыслыбыҙ.

Эйе, нәҫел тамырҙары көслө һәм ҡотло була Әсмә апайҙың. “Атайым Мәүләмбирҙе Ғәбделәхәт улы менән әсәйем Ғәйшә Юлмөхәмәт ҡыҙы, 1927 йылда өйләнешеп, алтмыш алты йыл бергә тормош юлы үттеләр”, — тип хәтерләй Әсмә апай. Ғаиләлә ун бер бала үҫә. Әсмә апай араларында иң өлкәне. “Тормош ауыр булһа ла, бөтөнөбөҙ ҙә уҡып, һөнәрле булдыҡ. Хәҙерге көндә барыбыҙ ҙа, шөкөр, үҙ ғаиләләре менән иҫән-һау йәшәп ята”, — тип дауам итә ул. Беҙ ҙә был шатлыҡты уртаҡлашабыҙ, Ғәйшә Торомтаева һымаҡ Герой-әсәләр, Мәүләмбирҙе Торомтаев һымаҡ аҫыл ир-уҙамандарҙың исемен хөрмәт менән иҫкә алабыҙ.

Аҫыл зат аҫыл зат инде. Тормош юлындағы бөтөн ҡаршылыҡтарҙы, ауырлыҡтарҙы сабырлыҡ, тырышлыҡ менән еңеп сыға Әсмә апай. Үҙе лә тормош иптәше Усманов Сәлимйән Әбүбәкер улы менән ике ҡыҙ, бер ул үҫтерә. Өсөһө лә юғары белемле, күптән башлыкүҙле булып, матур итеп донъя көтәләр. Үкенескә, Сәлимйән ағай 1987 йылда яҡты донъя менән хушлаша. Донъяның (кешеләрҙең) ғәҙелһеҙлеге, яуызлыҡ тигән яман сир ҙә ваҡытынан алда ҡаҡшата әҙәм балаларының һаулығын. Бына бер генә эпизод. Коммунист Сәлимйән Усмановты, ҡайһы мәктәптә эш насар, шунда директор итеп ебәрәләр. Шулай Иҫәнгилде мәктәбендә имен-аман ғына эшләп ятҡан бер мәлдә “Һәнәк” журналында “Ҡорбан ите ашарға ҡунаҡҡа барған” тип яҙып сығалар. “Иптәшемде шул ғына хәбәр өсөн эшенән алдылар. Беҙ яңынан Аҡъярға ҡайттыҡ. Фатир юҡ ине. Иҫке генә саман өй һатып алып, 1965 йылдан бирле шунда йәшәнек”, — ти Әсмә апай. Һаман да шул иҫке саман өйҙә йәшәй Рәсәйҙең халыҡ мәғарифы отличнигы, бөтөн республикала дан ҡаҙанған “Ҡош юлы” ансамблен ойоштороп, уға ҡанат ҡуйған халыҡ йырсыһы, сәсәниә Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы Усманова. Аптырарһың был хәйбуллаларға. Урыҫтың “Нет пророков в своем отечестве” тигән ғибрәтле әйтеме буйынса йәшәйҙәрме икән әллә улар? 75 йәшкә етеп, әле һаман илем, халҡым тип янып йәшәгән һәм ансамбль етәксеһе булып эшләп йөрөгән Әсмә Усмановаға Аҡъярҙа берәй йыйнаҡ ҡына булһа ла лайыҡлы фатир биреп булмаймы ла, ниһайәт, халыҡ сәнғәтен үҫтереүҙәге, халыҡ рухын һаҡлау өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн республикабыҙҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән исемдә юллай алмайҙармы? Арабыҙҙа ундай аҫыл заттар һирәк, ваҡытында ҡәҙерҙәрен белеп ҡалайыҡсы, туғандар!

Ә бит йыр, сәнғәт, концерттарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашыу — былар барыһы ла кистәрен, көндөҙгө эштән һуң йәки ял, байрам көндәрендә атҡарылған эштәр. 70 йәше тулғансы эшләй Әсмә апай. Орск дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетын тамамлап ҡайтҡандан һуң, 1954—1994 йылдар эсендә, ҡырҡ йыл буйы, районның төрлө мәктәптәрендә балалар уҡыта, артабан 70 йәше тулғанға тик-

лем район Тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейында этнография буйынса әйҙәүсе белгес булып эшләй. Ә инде сәнғәткә ылығыуы мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ башлана. “Ниндәй генә йыр бар ошо яҡта, шуны белеп үҫтем, күбеһен атайымдан отоп алдым”, — ти Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы. Йырға, йырҙы еренә еткереп ентекле башҡарыу мәсьәләһенә ҡарата атаһы бик талапсан була. “Урал”ды, “Буранбай”ҙы йырлаған кеше — ысын йырсы, тип әйтә торған була Мәүләмбирҙе Торомтаев. “Таштуғай”, “Шаһибәрәк”, “Илсе Ғайса”, “Мәғзүмә” — атайым был йырҙарҙы бигерәк яратып, үҙенсә генә моңланып, хисләнеп йырлай торғайны”, — ти Әсмә апай.

”1948 йылда Аҡъярҙа район мәҙәниәт йорто төҙөлөп бөтә. Шуны асыу тантанаһында беҙ, Аҡъяр урта мәктәбе уҡытыусылары, — ти Әсмә апай, — Б.Бикбайҙың “Ҡарлуғас” пьесаһын сәхнәгә ҡуйҙыҡ”. Орскиҙа уҡыған йылдарҙа ла ул ҡаланың художестволы үҙешмәкәрлек концерттарында ҡатнаша. Үҙе эшләгән мәктәптәрҙә музей мөйөштәре булдырыу эше менән дә шөғөлләнә, 1-се Аҡъяр урта мәктәбендә пенсия йәшендәге уҡытыусыларҙан “Ветеран” тигән фольклор төркөмө ойоштора. Унда онотолоп барған халыҡ йырҙарын, уйындарҙы тергеҙәләр, ҡумыҙҙа уйнайҙар. 1980 йылдан башлап тормош иптәше Сәлимйән Усманов менән бергәләп район балалар туристик станцияһы эргәһендә буласаҡ район музейы өсөн экспонаттар туплау эшенә тотоноп китә. “Икәүләп үҙебеҙҙең “Жигули”йыбыҙ менән район буйлап ауылдарҙа материалдар йыйып йөрөнөк”. Сәлимйән ағай донъя ҡуйғас, Әсмә апай бөтөн йыйған әйберҙәрҙе буласаҡ район музейына тапшыра. Район музейы нигеҙҙә шул экспонаттар иҫәбенә эшен башлап ебәрә. 1994 йылда Әсмә Усманова үҙе лә музейға эшкә күсә. Уны экспонаттар менән байытыуҙа “Ҡош юлы” төркөмө ағзалары ла әүҙем ҡатнаша.

Әсмә Усманова үҙ ғүмерендә бик күп бүтән төрлө йәмәғәтселек эштәрендә лә ҡатнаша: район судының халыҡ заседателе, ике тапҡыр ауыл советы депутаты итеп һайлана. Башҡортостан уҡытыусыларының V һәм VI съездарында делегат була. Бер нисә миҙал, шул иҫәптән “Хеҙмәт ветераны”, “Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фиҙакәр хеҙмәт өсөн” миҙалдары менән бүләкләнгән. 1991 йылда ул 10-сы республика сәсәндәр бәйгеһендә лауреат исемен ала, 2002 йылда “Бишек йыры” Республика конкурс-фестивалендә лауреат исеменә һәм Гран-приға лайыҡ була. Уның башҡарыуында ун йыр Башҡортостан радиоһының фондына индерелгән.

Уҡытыусы, йырсы, фольклорсы Әсмә Усманованың балаларға эстетик тәрбиә биреүе, сит илдәрҙәге балалар менән бәйләнеш урынлаштырыуы, башҡорт музыкаль фольклорын һәм этнографияһын өйрәнеүсе ғалимдар менән хеҙмәттәшлек итеүе хаҡында айырым һөйләп үтеү кәрәктер. 1980-се йылдарҙа ул туристик станция эргәһендә Интернациональ дуҫлыҡ клубы ойоштороп, уның эшенә етәкселек итә. Бында төрлө илдәрҙең балалары менән хаттар алышалар, дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаштырыла. 1991—1996 йылдарҙа Әсмә апай 1-се Аҡъяр урта мәктәбендә “Халыҡ таланттары” түңәрәгенә етәкселек итә. Уҡыусы

балалар менән “Ҡош юлы” ансамбле репертуарындағы элекке йырлы уйындарҙы (“Наза”, “Кәриә-Зәкәриә”, “Көлтә бәйләү”, “Өйрәкәйем, сумаһың”, “Өстаған”), таҡмаҡтар, йырҙар, ҡобайырҙар (“Хәйбулла Байығы”, “Ҡара юрға”, “Һылыу ҡыҙҙар”, “Сыңрау торна”, “Партизанка Мәйсәрә”) өйрәнәләр, район күләмендә үткәрелгән сараларҙа ҡатнашалар.

1990 йылда районға Венгрияның Сегед ҡалаһы гуманитар университетынан билдәле ғалим, башҡорт телен, этнографияһын, мифологияһын өйрәнеүсе белгес Йозеф Торма һәм үҙебеҙҙең ғалимә, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова килә. Әсмә Усманова уларҙы башҡорт халҡының им-томдары, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыра.

1992 йылда Гнесиндар исемендәге Мәскәү музыка академияһы профессоры В.М.Щуров һәм Өфө дәүләт сәнғәт институты проректоры Ф.Х.Камаев етәкселегендәге фольклор экспедицияһы, Голландияның “Парадокс” музыкаль фирмаһының заказы буйынса районға килеп, халыҡ йырсыларынан, шул иҫәптән Әсмә Усмановнан башҡорт халыҡ йырҙарын, таҡмаҡтар, бәйеттәр, ҡобайырҙар яҙып ала.

1996 йылдың сентябрендә Венгрияның Будапешт университеты аспиранты Даут Кири, төркиәтсе-этнограф һәм фотограф Ласло Кункович менән бергә Әсмә Усманова район буйлап экспедицияла йөрөй, Үрнәк, Аҡназар, Йәнтеш, Һаҡмар Бүреһе ауылдарында йырсылар, ҡурайсылар, һәр төрлө һөнәрмәндәр менән осрашып, материалдар йыялар, ҡунаҡтар “Ҡош юлы” фольклор ансамбле ағзалары менән осраша.

Сәсәниә Әсмә Усмановаың үҙе ижад иткән шиғри әҫәрҙәре араһында “Сәсән” тигән күләмле ҡобайырҙа ошондай фәһемле һүҙҙәр бар:

Сәсән теле һөйләүҙә,  
Сәсән моңо көйләүҙә,  
Сәсән теле әкиәттә,  
Сәсән теле бәйеттә,  
Сәсән һүҙе әйтештә.

Сәсән шатлыҡ өләшә,  
Һүҙе менән көрәшә,  
Сәсән һүҙе нур сәсә,  
Сәсән тигән затлы йәнде  
Тыуҙырған ҡайһы әсә,  
Тыуҙырған ҡайһы әсә!

Был һүҙҙәрҙә сәсәниәнең үҙенең дә колоритлы һыны күҙ алдына килеп баҫа. “Сәсән ғәҙеллек яҡлы, Сәсән күңеле паклы, Сәсән ул халыҡ яҡлы”, — ти Әсмә Усманова. Илде-көндө хәстәрләп, хаҡ һүҙҙе йыр, шиғыр, ҡобайыр теле менән халыҡҡа еткереп, илһамлы ижад тормошо менән йәшәй ул. Ысынлап та, Сәсән шатлыҡ өләшә, һүҙе менән көрәшә, Сәсән һүҙе нур сәсә. Илебеҙгә тоғро хеҙмәтең өсөн рәхмәт һиңә, Сәсәниә!